# Талантка лайыклы баҳа



1995 йылда республикабыҙҙа әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә юғары ижади уңыштарға өлгәшкән йәштәр өсөн Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт премияһы булдырылғайны. Ошо ваҡыттан алып был абруйлы исемгә 24 йәш талант — төрлө-төрлө һөнәр эйәләре — шағир, яҙыусы, музыкант, йырсы, рәссам, композиторҙар лайыҡ булды.

Премия йылдан-йыл юғарыраҡ баһа ала бара, уға дәғүә итеүселәр ҙә арта, йәш ижадсыларҙың әҙерлек кимәле, ижади һәм профессиональ оҫталығы ла камиллаша. Әйтәйек, 2001 йылғы конкурста ҡатнашыуға дәғүә иткән бер нисә тиҫтә кешенең ун өсө генә артабан ҡатнашыу өсөн һайлап алынды, шулар араһынан иң таһыллылары ғына абруйлы премияны яуланы.

Улар өсәү — "Аҡбуҙат" балалар журналының яуаплы сәркәтибе, рәссамбиҙәүсе Сулпан Билалова, "Аҡйондоҙ" төркөмө етәксеһе, композитор Урал Иҙелбаев, Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры актеры Азамат Хәлилов.

Лауреаттарҙың исемдәре республикабыҙҙа киң билдәле. Үҙенсәлекле рәссам Сулпан Билалованың сағыу һүрәттәре балаларҙың ғына түгел, өлкәндәрҙең дә күңелен арбай. Сулпандың байтаҡ эштәре республикала уҙған күргәҙмәләрҙә, халыҡ-ара конкурстарҙа ла юғары баһа алды.

Композитор Урал Иҙелбаев иһә йыр-моң һөйөүселәргә үҙенсәлекле көйҙәре аша яҡшы таныш. 1993 йылда Норвегияла уҙған Э.Григ исемендәге Халыҡ-ара конкурста ҡатнашты, республикабыҙ композиторҙары араһында конкурста ла лауреат булыуы уның зауыҡлы ижады хаҡында һөйләй.

Йәш композитор күп кенә документаль һәм художестволы фильмдарға, театр сәхнәләрендә барған "Айгөл иле", "Шайморатов-генерал", "Көнләш, Америка, көнләш!", "Күрәҙәсе" кеүек спектаклдәргә яҙылған матур көйҙәр авторы.

Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры актеры Азамат Хәлилов театр һөйөүселәргә "Ҡаһым түрә", "Инә бүре ҡарғышы", "Диләфрүзгә дүрт кейәү" спектаклдәрендә төп ролдәрҙе юғары оҫталыҡ менән башҡарыуы аша яҡшы таныш.

Абруйлы премияны лауреаттарға Башҡортостан Республикаһының Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов тапшырҙы һәм Башҡортостанда йәштәрҙең ижади мөмкинлектәрен асыу һәм үҫтереү өсөн бөтә шарттар тыуҙырылыуын, Президент тарафынан "Башҡортостан йәштәре" программаһы булдырылыуын билдәләп үтте.

Премьер-министр йәштәрҙең әүҙемлеген, уларҙың йәмәғәт эштәрендә, республикабыҙҙа социаль-иҡтисади реформаларҙы тормошҡа ашырыуҙа ихлас ҡатнашыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды, киләсәктә фән өлкәһендәге ҡаҙаныштар өсөн дә махсус премия булдырыласаҡ, тигән ҡыуаныслы хәбәрҙе еткерҙе.

*Зөһрә Алтынбаева*



08-2001.p65 199 30.10.01, 11:39
Black